## ТЕЛГӘ ЗАРЯДКА йәки ТЕЛ ӨСӨН КҮНЕГЕҮҘӘР

Мин күктә, һеҙ ерҙә!
Мин күктә, һеҙ ерҙә!
Бик рәхәт миңә үрҙә,
Ҡурҡыныс түгел бер ҙә!

Мәктәптәр матур биҙәлгән,
мәктәптәр ишеге асыҡ.
Балалар уҡырға бара,
Шатланып,дәртле баҫып.

Мейес башында биш бесәй,
Биш бесәйҙең биш башы.
Биш бесәйҙең биш башына
Емерелмәһен мейес ташы.

Әйтсе миңә, әйтсе миңә,
Әйтсе серен, әсәкәй!
Әллә һин бешергәнгәме,
Бигерәк тәмле әпәкәй!

Һалҡын һыулы Һаҡмарҙа һайрай һары һандуғас.

Бәҙриҙең бөҙрә Бәҙәре биҙәкһеҙ биҙрәһен биҙәкләткән.

Һары һаҡаллы Һаҙыйҙың һары Һарыголағы һары һаламда ята.

Усыма усаҡтан уҫаҡ осҡоно осто.
Турғайлы туғайҙағы талға тамға тамғалағандар.

Ҡыйын өҙҙөрттөрҙөләр,сүбен өйҙөрттөрҙөләр,саңын өрҙөрттөрҙөләр.

Беҙҙең кәзәбеҙ мөгөҙлө,һеҙҙең кәзәгеҙ мөгөҙһөҙ..

Эй энекәш, энекәш,
Этең этлеген итә,
Эш эшләп этләнгәедә,
Тота ла тешләп китә

Эт эшенең эҙемтәһе-
Минең йыртылҙан күлдәк.
Эргәмдә юҡ энә, еп тә,
Торам эт кеүегерәк.

**Өләсәйем.**

Өйҙәгеләрҙе өҙлөкһөҙ
Өйрәтә өләсәйем:
Өлкәндәр өгөт өләшә,
Өгөттәр өләшәйем!
Өлкәндәр өмөт өләшә-
Өмөттәр өләшәйем!
Өҙөлөп- өҙөлөп,
Өҙөлөп- өҙөлөп,
Өндәшә өләсәйем.

ТЕЛГӘ ЗАРЯДКА йәки ТЕЛ ӨСӨН КҮНЕГЕҮҘӘР

1. «Тел көнөн нисек башлай?»
Тел иртән тора ла:
- тышҡа сығып кирелә;
- шунан иртәнге һыуыҡтан ҡалтырана;
- өйгә кереп йыуына;
- шунан өйөн йыйыштыра: түшәмен (аңҡауҙы) һөртә, иҙәнен йыуып ала, тәҙрәләрен (сикәләрҙе) таҙарта ;
- эше бөткәс тышҡа сығып атта йөрөй;
- тыштан ингәс сәй эсә, аыҙ ситенә буялған ҡаймағын ялап ала;
- шунан кәнфит ашай.
2. «Ат сабышы»
Ат сапҡан төҫлө итеп телде шартлатыу.
3. «Кемдең теле оҙонораҡ?»
Тел мөмкин тиклем алға таба сыға һәм 3-5 секундҡа шулай ҡатып ҡала.
4. «Тештәрең нисәү?»
Тел ярҙамында тештәрҙе һанау, тәүҙә аҫҡы, шунан өҫкө.
5. «Ябыҡ ҡапҡа»
Ирендәр ҡымтылған. Тел көс менән тышҡа сығырға тырыша, ә ирендәр ҡаршылаша.
6. «Ҡытыҡ килә»
Ауыҙҙы ябып, телдең осо менән яй ғына хәрәкәттәр яһап аңҡауҙы ҡытыҡлайбыҙ.
7. «Телде тешләү»
Аҡрын ғына итеп телдең осон, ситтәрен тешләп сығабыҙ.
8. «Акула тештәре»
Тел менән тештәрҙе үткерләйбеҙ, сарлайбыҙ: ике яҡтан да аҫҡы тештәрҙе, шулай уҡ өҫкөләрен дә.
9. «Осло ҡаҙаҡ»
Тел көс менән сикәне тишергә тырыша, ике яғын да, алмаш-тилмәш.
10. «Йөҙөк»

Телдең осо аңҡау буйлап артҡа таба бара һәм түңәрәк йөҙөк барлыҡҡа килтерә.

Өп-өп-өп – эттәр сабыша өрөп,
Өп-өп-өп – төндәр буйына йөрөп.
Еп-еп-еп – хужаһы еткән килеп,
Еп-еп-еп – эте икәнен белеп.

Рә-рә-рә – урман буйлап йүгерә,
Ра-ра-ра – ҡулын болғап саҡыра.
Рө-рө-рө – япраҡ ярған бөрө,
Рө-рө-рө – урманда тыныс йөрө.

Са-са-са – был бит беҙҙең Миңниса,
Се-се-се – Миңниса, ярҙам итсе.
Сә-сә-сә – әсәйең шалҡан сәсә,
Се-се-се – орлоҡтарҙы бирһәңсе.

Ça-ça-ça – ҡайһылай матур баça,
Са-са-са – тыпырлап күңел аса,
Са-са-са – дәртләндерәм: «Их, ас-са!»
Са-са-са – бейей шулай башҡортса.

Та-та-та – Талип тауыҡ ашата.
Ти-ти-ти – саҡыра, ти-ти-ти.
Тә-тә-тә – күршенекен өркөтә,
Ти-ти-ти – йөрөмә бында, кит, ти.
Ты-ты-ты – күрше тауығы ҡурҡты,
Тө-тө-тө – кәртәнән осоп төштө.
Те-те-те – Талип тағы ем һипте,
Тө-тө-тө – Талиптың еме бөттө.

Уа-уа-уа – хуш еç бөркә яҙын һауа,
Уы-уы-уы – татлы шул шишмә һыуы.
Уа-уа-уа – үҙе инде бер дауа,
Уы-уы-уы – ялан буйлап атлауы.

Фа-фа-фа – тырышып яҙа Сафа,
Фе-фе-фе – кәкре-бөкрө хәрефе.
Фа-фа-фа – матур яҙыу бер яфа.
Ça-ça-ça – ручканы ул баça,
Са-са-са – хәрефтәр унан ҡаса,
Фа-фа-фа – һаман тырыша Сафа.
Фе-фе-фе – матур сыҡты хәрефе,

Фе-фе-фе – күтәрелде кәйефе.

Һең-һең-һең – ҡайҙан ҡайтып киләһең?
Һаң-һаң-һаң – ял итеп ал арыһаң.
Һәң-һәң-һәң – дәртле баҫып йөрөһәң,
Һәң-һәң-һәң – бөтә эшкә өлгөрһәң,
Һең-һең-һең – моратыңа етерһең.

Һы-һы-һы – был Һиҙиәт ҡустыһы,
Һе-һе-һе – кемдеке һуң берәүһе?
Һен-һен-һен – танып алдым икәүһен,
Һөн-һөн-һөн – саҡырығыҙ өсөһөн,
Һе-һе-һе – нисә булды бөтәһе?

Ша-ша-ша – Шакир шарға талаша,
Шы-шы-шы – ҡыҙыу уйын барышы.
Шә-шә-шә – малайҙар шар бәрешә,
Ше-ше-ше – уйнай ала һәр кеше.

Ыж-ыж-ыж – һыуыҡ әйтә: «Ыж-ыж-ыж»,
Аж-аж-аж – йүгереп йөрө, Ғилаж.
Жыу-жыу-жыу – елдәр әйтә: «Жыу-жыу-жыу»,
Шыу-шыу-шыу - Ғилаж, тауҙан шыу ҙа шыу.

Алланған алма аша,
Балдары тама-тама.
Аша алһыу алманы,
Балына мана-мана.

Абағаға баға-баға,
Башым бәрҙем бағанаға.

Бүрәнәгә баҫты бүҙәнә,
Бүҙәнәне баҫты бүрәнә.
Ғәйеп бүрәнәлә лә бар,
Бүҙәнәлә лә бар.

Һибәт менән Һәтисә
Ике ҡалаҡ һөт эсә:
Бер ҡалағын Һибәт эсә,
Ә береһен - Һәтисә.

Өммөгөлсөм өләсәйем
Өлөштәрен өләшә.

Һеҙҙең Зөфәр бөҙрә булһа,
Беҙҙең Зөһрә лә бөҙрә.

Әлимә, Әсмә, Әлиә
Күмәкләшеп сәй эсә.

Миңлеғәле ҡурайының
Моңдарын мин тыңланым.

Мейес башында биш бесәй,
Биш бесәйҙен биш башы.
Биш бесәйҙен биш башына
Емерелмәһен мейес ташы.

Ҡара ҡарға ҡарҙан бара,
Ҡанаттарын ҡаға-ҡаға.

Баҫ, баҫ, Аҫылбикә!
Баҫ, баҫ, Аҫылбай!
Әҫәрләнеп баҫмайынса,
Тәьҫирләнеп баҫмайынса,
Иләҫләнеү баҫылмай!

Ҡарға әйтә ҡар-ҡар-ҡар,
Бында еләк бар-бар-бар.
Тик яланы тар-тар-тар
Еләк өҫтө ҡар-ҡар-ҡар.

Уба уҙып, ужым урап,
Ухылдашып, уфылдашып,
Урманлыҡта, уҫаҡлыҡта,
Ун утындан усаҡ яҡтыҡ.

Ҡарға әйтә ҡар-ҡар,
Мейестә бәлеш бар, бар.
Мейестән бәлеш алыр инем,
Өйҙә ҡунаҡ бар, бар.

Сәғәт һуға даң-даң,
Хәбәр бирә таңдан.
Мәктәпкә барырға
Ун биш минут ҡалған.

ӨЛӘСӘЙЕМ
Өйҙәгеләрҙе өҙләкһеҙ
Өйрәтә өләсәйем:
«Өлкәндәр өгөт өләшә,
Өгөттәр өләшәйем!
Өлкәндәр өмөт өләшә -
Өмөттәр өләшәйем!» -
Өҙөлөп-өҙөлөп,
Өҙөлөп-өҙөлөп,
Өндәшә өләсәйем.
(Ә. Әхмәт-Хужа)

ЕҮӘЙРӘ
Епшек елдә еүешләнмәҫ,
Еңмешләнмәҫ Еүәйрә…
Еңмешләнмәһә Еүәйрә,
Ереклеләге еңгәһе
Емеш-еләк ебәрә.
Егәҙеләге еҙнәһе
Ебәк елән ебәрә -
Еңмешләнмә Еүәйрә!
(Ә. Әхмәт-Хужа)

КӨЛӘС
Көләс кеткелдәп көлә:
Кемде күргән көҙгөлә?
Күркәмләнеп киткән Көләс,
Көйәҙләнеп киткән Көләс,
Күкһел күлдәген кейгәс!
Күлдәген күреп көҙгөлә,
Көләс кинәнеп көлә.
(Ә. Әхмәт-Хужа)

ӘЙТСЕ
Әйтсе миңә, әйтсе миңә,
Әйтсе серен, әсәкәй!
Әллә һин бешергәнгәме,
Бигерәк тәмле әпәкәй!
(А. Игебаев)

ГӨЛБАҠСАБЫҘ ГӨРЛӘЙ
Гөлбаҡсабыҙ гөрләүектәй гөрләй,
Гөлбаҡсабыҙ гөжләй, геүләй, гел-гел…
Гәпләшһәләр Гөлнур, Гөлдәр, Гөлкәй,

Гәпләшһәләр Гәүһәр, Гөлшат, Гөлгөл.
(Ә. Әхмәт-Хужа)